# Йомаҡтар

- Тәбиғәт тураһында

- Өс йөҙ алтмыш биш бала турғай,
  Ҡырҡ һигеҙ инә турғай,
  Ун икеһе аҡҡош,
  Шуны белмәгән-йолҡош.



- Ун ике туған,
  Теҙелешеп торған.

- Ҡыйҡым, ҡыйҡым, ҡыйҡым ҡош,
  Ҡыйҡылдашып бара имеш,
  Утыҙлаған йомортҡа
  Ояһында ҡала имеш.

- Күтәрелде, бәрелде,
  Күк ишеге ярылды,
  Шарт итте, шорт итте,
  Ялт итте, үтеп китте.



- Аллы-гөлле яулығымды
  Ситән аша ырғыттым.


SY FORUM

- Күк тирмәнең эсендә
  булыр ике туп,
  Көндөҙ береһен тот,
  төндә береһен тот.



- Өй башында һаплы сүмес.


α Полярная
δ
ε
ξ
η
γ
β
Малая Медведица
α
β
Большая Медведица
ε
γ
ξ
δ
η



- Килдем, килдем,
  Тышҡа ҡуйып индем.



Аға ла аға - ағып бөтмәй,

Йүгерә лә йүгерә - йүгереп туҡтамай.



- Туҫтаҡ тулы һыу,

  Һыуҙың өҫтө быу.



- Үçемлектәр донъяһы

- Яҙын яҙыла,
  Көҙөн йыйыла,
  Йәй һыуына,
  Ҡыш үҙе йылыта.



- Яҡын барма,
  Яҡын барһаң, ҡулыңа алма,
  Ҡулыңа алһаң, бәлә һалма.



- Ҡырҙа үҫкән бер бала,

  Өйгә килеп моң һала.



- Эсе ҡыҙыл, тышы ҡара,

  Ышанмаһаң, ашап ҡара.


Сорта черной смородины - Загадка

- Йоморо-йоморо ҡыҙыл төймә,
  Башы түбән һалынған,
  Уға ҡыҙҙар ялынған.



- Түтәлдә үҫкән йәш ҡыҙҙы
  Кем үпһә, шул илар.



Бәләкәй генә йорт,
Эсе тулы ҡорт.



- Йәнле донъя.

- Лап-лап килә, атлап килә,
  Йүгереп килә, үкереп китә,
  Йөрәгеңде ярып китә,
  Баш ҡапҡасын айырып китә.



- Ағастан-ағасҡа
  һикерә ҡарасҡы.
  Сәтләүекте ярата,
  Һунарсыны ҡарата.



- Аҡ кейем кейгән,
  ҡолағы ергә тейгән.



- Энәләрен ҡалдырмай йөрөй,
  үҙе тегенсе түгел.



- Түңәрәк кулдә эт өрә.



- Ауыҙы бар, көйшәмәҫ.



- Өҫтөндәге кейеменең ямауы бар, йөйө юҡ.



- Афариндар, маладистар!